*“Ватандаш” журналы уҡыусыларына Ҡасим Ғирфановтың[1] “Башҡорт ғәскәрҙәренең Советтар яғына сығыуҙары мәсьәләһе тирәһендә” тип аталған, “Башҡорт аймағы” журналының 1928 йылғы 5-се һанында баҫылып сыҡҡан, ғәрәп графикаһында яҙылған мәҡәләнең транслитерацияһын тәҡдим итәбеҙ. Мәҡәләнең ҡиммәте шунда: автор ошо ваҡиғаларҙың тере шаһиты. Ул ғына ла түгел, мәҡәлә донъя күргән саҡта ваҡиғаларҙа ҡатнашҡан геройҙарҙың күбеһе иҫән була, юғары органдарҙа етәксе вазифалар биләй. Икенсенән, “Башҡорт аймағы” журналы йәш Башҡортостандағы киң популяр фәнни журналдарҙың береһе. Журналды матбуғатҡа әҙерләгән фәнни редакторҙар үҙҙәре лә Милли хәрәкәттең үҙәгендә торған шәхестәр — тимәк, мәҡәләлә хаталарға урын юҡ. Тағы ла шул мөһим: тарихи ваҡиғаларҙан һуң ни бары ун йыл үҙған, шуға күрә улар тулыраҡ, мулыраҡ, сифатлыраҡ. Һәм, ахыр сиктә, иң төп дәлилдәрҙең береһе: Сталин репрессияһынан һуң тарихи факттарҙы, бигерәк тә аҙ һанлы халыҡтарҙың яҙмышына бәйле факттарҙы һәм шул осор геройҙарының исемдәрен һәм ҡаҙаныштарын оноттороу өсөн көслө аҙымдар яһала. Тарихи документтар сәйәси маҡсаттан сығып фальсификациялана. Ә әлеге мәҡәлә бындай үҙгәрештәрҙән азат.*

*Мәҡәләгә транслитерация яһаусы автор тарафынан хәҙерге башҡорт теленең грамматикаһына ярашлы төҙәтмәләр индерелде. Авторҙың тел һәм стиль үҙенсәлектәре һаҡланды. Ҡайһы бер рәсми документтарҙан һуң автор Ҡасим Ғирфанов иҫкәрмәләр бирә.*

*Гөлсәсәк САЛАМАТОВА,*
*филология фәндәре кандидаты*

---

[1] Ғирфанов (Вильданов) Ҡасим (Абдулҡасим) Ғирфан улы — тарихсы, публицист, шағир. 1889 йылда Ҡазан губернаһы Чистополь өйәҙе Иҫке Үтәмеш ауылында (хәҙерге Татарстан Республикаһының Сиремшән районы) тыуа. Башланғыс белемде тыуған ауылында ала. 1910 йылда Өфөләге “Ғәлиә” мәҙрәсәһенә уҡырға инә һәм 1913 йылдың мартына тиклем уҡый. Ш.Бабич менән яҡындан таныш була. Егерменсе йылдар уртаһында Ш.Бабич ижады хаҡында ваҡытлы матбуғатта мәҡәләләре донъя күрә. Вильданов фамилияһын яҡынса 1922—1925 йылдарҙа йөрөтә. Рәсми органдарҙан бирелгән документтар шул турала һөйләй (РФА Өфө ғилми үҙәгенең ғилми архивы, Ф.56. Оп.1. д.25, 38, 49). 1925—1927 йй. Башҡортостан совет партия мәктәбендә уҡыта. 1932 йылдың мартында Сталин исемендәге КУТВ (Коммунистический университет трудящихся Востока) аспирантураһын тамамлай. Университетта Урта Азия тарихы буйынса ассистент-стажер булараҡ лекциялар уҡый. Академик М.К.Любавский (1911—1917 йылдарҙа Мәскәү университеты ректоры, 1931—1934 йй. Өфөлә йәшәй һәм Башҡортостан тарихы хаҡында фундаменталь хеҙмәттәр яҙа) менән тығыҙ фәнни бәйләнештә була. 1933 йылдың июлендә Башҡортостан милли-мәҙәни фәнни-тикшереү институтында директор урынбаҫары итеп тәғәйенләнә һәм 1935 йылдың ноябренә тиклем эшләй. Шулай уҡ институттың тарих һәм иҡтисад секцияһын етәкләй. 1937 йылдың октябрендә ВКП(б) сафынан сығарыла. 1946 йылға тиклем Урта Азияла йәшәй. Уҡытыу эше менән шөғөлләнә. 1968 йылда вафат була. Ғәрәп графикаһы менән яҙылған автобиографияһы 70 бит самаһы (шул уҡ. Ф.56. Оп.1. Д.49). Был документта автор 1913 йылдан 1967 йылға тиклемге илдәге ваҡиғаларға үҙ биографияһы ерлегенән сығып тарихи баһа бирә.

*Ҡасим ҒИРФАН*

# Башҡорт ғәскәрҙәренең Советтар яғына сығыуҙары мәсьәләһе тирәһендә[2]

Тарих тәгәрмәсе әкрен генә һаман әйләнә, алға хәрәкәт итә. Көндәр, айҙар, йылдар һалмаҡ ҡына артта ҡала баралар. Шуның менән бергә уларҙың "эҙ"ҙәре, ҡалдырған әҫәрҙәре үткән көндәр туҙаны аҫтында күмелеп, юғала баралар. Бөйөк Октябрь революцияһының 10 йыллығын үткәрҙек. Ун йыл, был тарих өсөн бик кескенә бер дәүер киҫәге. Ләкин ошо ун йылдың башында — башланғыс. Ошонда эшләнгән эштәрҙең ҡалдырған әҫәрҙәре, тарих документтары хәҙер күбеһе юғалған, тарҡалып бөткән. Был документтарҙың ҡалғандары ла һаман юғалыу өҫтөндә. Тағы ла 10—15 йыл, һәм был әҫәрҙәрҙең күбеһе яңынан табылмаҫлыҡ булып тарих биттәренән юғаласаҡтар! Шунлыҡтан, тарихи ваҡиғаларға хөрмәт менән ҡараусы тарих һөйөүселәрҙең вазифаһы — тарихи әһәмиәте булған һәр бер документты юғалып ҡалыуҙан ҡотҡарыу булырға тейеш. Шуға күрә, башҡорт, татар һәм башҡа халыҡтарҙың Октябрь революцияһындағы хәрәкәттәре тураһындағы тарихи материалдарҙы йыйнауға ла хәҙер ваҡыт еткән. Октябрҙең ун йыллығын үткәрергә әҙерләнгән кешеләр өсөн был мәсьәләнең ни дәрәжәлә мөһим икәнлеге бигерәк тә асыҡ мәғлүм булды. Әле бөтәһе ун йыл ваҡыт уҙған. Ә документтарҙың күбеһе юғалып та өлгөргән. Әгәр хәҙерҙән йыйнамағанда, был әҫәрҙәрҙе бер ваҡытта ла йыйнап булмаясаҡ. Бына ошонан сығып, мин Башҡорт ғәскәрҙәренең Советтар власы яғына күсеүҙәре тураһындағы документтарҙы табылған ҡәҙәр бергәләп туплап бирергә булдым. Маҡсатым: бер яҡтан башҡорт революцияһы хәрәкәтендә башҡорт ялпыһы өсөн сиктән тыш шанлы булған был моменттың материалдарын юғалып ҡалыуҙан һаҡлау булһа, икенсенән, киләсәктә был мәсьәлә тураһында "Аймаҡ" (һүҙ "Башҡорт аймағы" журналы хаҡында. — ***Г.С.***) биттәрендә бирергә уйлаған мәҡәләләремә нигеҙ ташы һалыуҙыр.

Советтар яғына сығыу мәсьәләһе башҡорт, урыҫ әҙәбиәтендә бер нисә иптәштәр тарафынан яҙылһа ла, был мәсьәлә әле һаман да үҙенең тарихи тулылығы, бөтөнлөгө менән бирелгәне юҡ. Ҡайһы бер иптәштәр мәсьәләгә бик өҫтән генә ҡарап, уны яңылыш аңлатһалар, ҡайһылары, нигеҙ яғынан дөрөҫ алғандары, абстракт рәүештә яҙылған публицистик мәҡәләләр биреү менән ҡәнәғәтләнделәр. Хәлбүки[3], "Тарих бик конкрет әйбер" тигән ҡағиҙә һәр бер марксист тарихсы тарафынан хәҡиҡәт булараҡ ҡабул ителгән ҡағиҙәлер. Был ҡағиҙәнән ситкә тайпылыу, һәр ваҡытта, мәғлүм бер тарихи ваҡиғала ҡатнашҡан ялпының ролен игнорировать итеү менән, йәғни, иң төп йөкмәтмәне ситкә ҡалдырыу менән тамамлана.

Был мәсьәләне бөтә тулылығы менән бирә алыу дәғүәһенән йыраҡ булғаным хәлдә, мөмкин хәтле тулы бирергә тырышыу өсөн һис кем шелтәләмәҫ, тигән фекер менән ҡулыма ҡәләм алдым. Ләкин ҡабатлап әйтәм: был башланғыс мәҡәләлә мин тик тарихи материалдар биреү менән генә ҡәнәғәтләнеп, улар

---

[2] Мәҡәләнең ҡулъяҙмаһы РФА Өфө ғилми үҙәге ғилми архивында (Ф.56. Оп.1. Д.25) һаҡлана.

[3] Хәлбүки — шуға күрә.

тураһында фекер йөрөтөүҙе киләсәктәге мәҡәләләремә ҡалдырам. Был документтар “Ҡилешеү” тураһындағы мәсьәләнең ҡасан тыуғанлығы һәм нисек үҫкәнлеге тураһында яҡшы уҡ тулы материал булыуы яғынан бик әһәмиәтле. Ләкин беҙҙең өсөн ҡасан тыуғанлығы икенсе дәрәжәләге мәсьәлә булып, иң төп момент — нисек һәм ниндәй сәбәптәр тәьҫирендә тыуғанлығы. Ҡиләсәктәге мәҡәләләремдә мин бына ошо нөктәгә әһәмиәт бирәсәкмен. Мәсьәләнең барышын әҙерләү анһат булһын өсөн мин документтарҙы биреүҙә хронологик тәртип һаҡларға тырыштым. Тик беренсе номер аҫтында бирелгән документ ҡына бынан айырылып алына. Был документ хронология яғынан ҡарағанда 8 февралдән һуң яҙылған документ булырға тейеш. Сөнки уның аҙағындағы һүҙҙәр быны асыҡ аңлаталар. Ләкин был документ “Ҡилешеү идеяһының тыуыуы һәм үҫеше тарихын” яҡшы уҡ тулы аңлатҡанлыҡтан, мин беренсе урынға ҡуйыуҙы тейеш таптым.

**Документ номер 1**
**“Өфө шәһәрендәге сәүит власының ерле етәксе органдарына”**

Башҡорт халҡы әле Уч.собрание яҡлы булған социалист төркөмдәре менән берләшеп эш алып барған ваҡытында уҡ, Хөкүмәттең 1918 йыл 2 июлендә булған ултырышында, Чех-Словактар һәм Себер ҡалаларында булған урыҫ милләтселәренең һәр нәмәнән элек бөтә мәмләкәттәрҙәге мосолман халҡына ҡаршы йүнәлдерелгән асыҡ империалистик тенденцияһы алып барылған славянлыҡ манифестацияһына үҙенең ҡарашын билдәләгән хәлдә, башын тағы ла күтәргән славянлыҡ һәм Бөтә Донъя империализмына ҡаршы көрәшеү өсөн берләшеүгә тәҡдим итеп, Советтар власына һәм шулай уҡ демократтар төркөмдәренә мөрәжәғәт итергә ҡарар биргән. Шул маҡсат менән Башҡорт Өлкә Советы ағзаларынан ике кешенән — Ғәлиәхмәт Өмөтбаев (Төркиәгә) һәм Муллаян Халиҡовтарҙан (Советтар Рәсәйенә) ғибәрәт булған делегация ебәргәйне. Ләкин һуңғыһы (Муллаян Халиҡов. — ***Ҡ.F.***) ул миҙгелдә Советтар власына бик ауыр шарттар эсендә йәшәргә тура килгәнлектән, үҙенең өҫтөнә йөкмәтелгән вазифаны үтәй алманы. Бынан һуңғы ваҡиғалар: Болгария, Австрия һәм Германияла Бөтә Донъя империалистарының Рәсәйҙәге революцияға ҡаршы берләшеүҙәре, революция яҡлы демократия тарафынан үҙҙәренең дөйөм дошмандарына ҡаршы көрәшеү өсөн бөтә көстө берләштереү тейешлек мәсьәләһен сираҡҡа ҡуйҙылар. Һәм беҙ Уч.собрание комитеты ағзаларынан иң ҙурҙарынан берәренә йәшерен яҙыу менән мөрәжәғәт итеп, Советтар власы менән һөйләшергә тәҡдим иттек. Ләкин беҙҙең был мөрәжәғәтебеҙ ваҡытынан элегерәк булды, буғай. 22 ноябрҙә Ҡолчак диктатураһы иғлан ителгәндән һуң, (Максим Горький арҡыры беҙгә кәңәш биреүҙәре буйынса) Советтар власы менән һөйләшер өсөн беҙ тағы ла Мәскәүгә ике делегат ебәрҙек. Делегаттарҙан берәүе — рәсми документтар менән ебәрелгән Башҡортостан Хөкүмәте ағзаһы Гәрәй Ҡарамышев Уралда тотҡарлыҡҡа осрап, үҙенә тапшырылған эште үтәй алмай. Ә икенсе делегат — Башҡортостан Өлкә Советы ағзаһы Салахетдин (Сәләхетдин. — ***Ҡ.F.***) Атнағолов Быҙаулыҡ фронты арҡыры Советтар Рәсәйенә инеп, Бәләбәйгә китте. Унда комиссар булып алып, һөйләшеү өсөн Мәскәүгә бөтөнләй барманы.

Декабрҙең 15-дә Башҡорт Хөкүмәте тағы ла делегат — Башҡорт Өлкә Советы ағзаһы Муллаян Халиҡов менән Хәйретдин Сәғитовты ебәрҙе. Былар

тик ғинуарҙың һуңғы көндәрендә генә Өфөлә Совет власы вәкилдәре менән көрешеүгә ирештеләр. Һөйләшеү һөҙөмтәһен улар Башҡорт Хөкүмәтенә 8 февралдә хәбәр иттеләр.

Юғарыла һөйләнгән нәмәләрҙе күрһәтеп, Башҡортостан Хөкүмәте ағзалары һәм Башҡортостан революционный ғәскәрҙәре вәкилдәре был вәғәҙәнең иң ҡыҫҡа бер ваҡыт эсендә төҙөлөүе кәрәк икәнен Өфөләге Совет власы вәкилдәренең иҫтәренә төшөрәләр, сөнки башҡорт һалдаттарын һәм Башҡортостан эшсе һәм крәҫтиәндәрен Колчак һәм Дутовтың үс алыуынан һаҡларға кәрәк.

Төп нөсхәһенә ҡултамға һалғандар:

Башҡортостан Хөкүмәте рәйесе: Ҡулаев

Ағзалары өсөн (өс ҡултамға танылмай)

Айырым башҡорт революционный корпусының вәкилдәре:

Башҡорт ғәскәре командиры: Ә.Вәлидов

Ваҡытлы рәүештә Башҡорт ғәскәре штабы начальнигы вазифаһын үтәүсе: (ҡултамғаһы танылмай)

Төп нөсхәһе дөрөҫ: Ревком рәйесе (ҡултамғаһы юҡ. — ***Ҡ.F.***)

## Документ номер 2

30 ғинуар, 1919 йыл.

Өфө губернаһы революционный комитеты ағзалары ултырышының
Протоколы

Йыйылыштың составы:

Ревком рәйесе иптәш Б.Нимвицкий

Коммунистар партияһы комитеты ағзаһы һәм рәйесе иптәш В.Седенов

Халыҡ комиссарҙары вәкиле, Эске эштәр халыҡ комиссары иптәш Б.Эльцин

Башҡортостан Хөкүмәте вәкиле һәм Башҡортостан Өлкә Советы ағзаһы Муллаян Халиҡов

Гражданин Халиҡовтың Өфө губернаһы менән мөнәсәбәт булдырғанда учет алып барған кешеһе — В.Ягушин[4].

Ултырыш асылғандан һуң, гражданин Халиҡов үҙенең тышҡы мөнәсәбәт мәсьәләһендә хаҡлы вәкил сифаты менән 1919 йылдың 6 июлендә бирелгән (дөрөҫләнгән копияһы. Был протоколға ғиләүә[5] ителгән) мандатын тәҡдим итеп, үҙенең Советтар власы вәкилдәре менән һөйләшеү башларға Башҡортостан Хөкүмәте тарафынан вәкил ителгәнлеген белдерә һәм түбәндәге шарттарҙы иғлан итә:

1. Башҡортостан автономияһын танырға

2. Башҡортостандың эске идараһы төҙөлөшөн башҡорттарҙың үҙҙәренә тапшырырға һәм эске тәртипте һаҡлауҙы башҡорт отрядтарына тапшырырға.

3. 60 меңгә хәтлем һалдаты менән бер корпустан ғибәрәт булған регулярный Башҡорт ғәскәрен майҙанға килтереүҙә ярҙам итергә. Килешеү булған тәҡдирҙә был ғәскәрҙәр Колчакҡа ҡаршы һөжүм итәсәктәр. Ҡырғыҙҙарға һәм

[4] В.Егошин булырға тейеш.

[5] Ғиләүә — ҡусермә.

Төркөстанлыларға ғәскәр формировать итеү өсөн тейешле ярҙам күрһәтергә. Ғәскәрҙе бөтә кәрәк-ярак менән тәьмин итергә.

4. Ғәскәрҙе һәм эске идараны акса менән тәьмин итергә.

5. Элек большевиктарға каршы хәрәкәт иткән башкорт эшселәрен (деятелдәрен. — ***Ҡ.Ғ.***) ғәфү итергә, йәғни уларҙы язаламаска.

6. Башкортостанға төрки-татарҙарҙан башка кешеләрҙе күсереүҙе туктатырға.

7. Башкорт халкының шәрек өлөшөндә йәшәгәндәре Себер реакционерҙары кулында яфаланмаһындар өсөн тиҙлек менән фронтты Силәбегә һәм Троицкиға хәтлем һуҙырға.

Фекер алышкандан һәм гражданин Халиков тарафынан кайһы бер аңлатмалар бирелгәндән һуң, ревком ағзалары был шарттарға түбәндәге нәмәләр менән яуап бирҙеләр:

1. Милли Советтар йөмһүриәттәре төҙөү нигеҙендә беҙ был мәсьәләне Эшсе һәм Крәстиән депутаттары Советы съезында хәл итергә тейешбеҙ, тип һанайбыҙ.

2. Советтар власы элекке Рәсәй империяһы составына ингән халыктарға үҙенең карашын — мөнәсәбәтен һүҙҙә түгел, бәлки, ғәмәлдә үткәрә (мәҫәлән: Эстон, Литва йөмһүриәттәре). Үҙенең был карашын регуляр рәүештә Советтар Рәсәйе инде үткән йылда ук татар, башкорт һәм башка йөмһүриәттәр ойоштороу мәсьәләһен тикшереү өсөн Өфөлә төрки-татар вәкилдәре катнашы менән съезд йыйырға уйлаған ине, Чех-Словактар фетнәһе һәм Рәсәйҙең шәректәге буржуазияһы, шулай ук башкорт буржуазияһы элементтары тарафынан ак гвардия бандалары ойошторолоуы милли мәсьәләне хәл итеүҙе артка шылдырҙы.

3. Башкорт Хөкүмәтенең хәҙерге хәлен мөстәкил дәүләт булырлык тип һанап булмай. Ул тәү сиратта эшсән башкорт халкының мәнфәғәтен аңлатыу (выражать итеү) роленә дәғүә итә алмай торған милли партиянан ғибәрәт бер нәмә. Был партия хәҙер ҙә билгеле шарттарҙа Советтар власын танырға әҙер. Был шарттар — милли автономияны таныу — беҙҙең яуабыбыҙҙың беренсе матдәһендә[6] дөрөҫ хәл ителә. Делегаттарҙың кулында һөйләшеүҙе алып барыу өсөн билгеле, дөрөҫ вәкәләт өсөн инструкция булмағанлыктан, башкорт делегаттарына тағы ла тулырак, билгелерәк мандат кәрәк. Был ултырыш предварительный, рәсми характер төҫөндә лә түгел, бәлки, тик Советтар Рәсәйенең милли мәсьәләгә мөнәсәбәте нескәлеген аңлатыуҙан ғибәрәт. Фронт аркыры тоткарһыҙ үткәреү мөмкинлеге тураһында гражданин Халиков тарафынан куҙғатылған мәсьәлә хакында хәрби власть вәкилдәре менән мөнәсәбәткә килергә карар бирелә.

Ревком рәйесе: Нимвицкий
Совнарком вәкиле, Эске эштәр халык комиссары: Б.Эльцин
Ревком ағзаһы: В.Седенов
Башкортостан Хөкүмәте вәкиле: М.Халиков
В.И.Егошин

Протоколдағы култамғалар бөтәһе лә йыйылышта катнашыусыларҙың үҙ кулдары менән куйылған. Протоколдың аҙағында 5 матдәнән ғибәрәт хаталар төҙәтелә. Был хаталар протоколды машина менән баҫканда ебәрелгән хаталар. Быларҙың төҙәтелеүен раҫлап, ревкомдың мисәте баҫылған һәм шул ук кешеләр

[6] Матдәһендә — пунктында.

йәнә лә үҙҙәренең ҡултамғаларын ҡуйғандар. Был протоколға Муллаян Халиҡов тарафынан тәҡдим ителгән таныҡлыҡ ҡағыҙының ревком тарафынан раҫланған копияһы ғиләүә ителгән. Был таныҡлыҡ ҡағыҙы бирелеүенең тарихы һәм дәрәжәһе Советтар власы менән һөйләшеү өсөн түгел, бәлки Башҡорт Хөкүмәте төҙөлгән саҡта Халиҡовҡа тышҡы мөнәсәбәттәрҙе яйлаусы бүлек тарафынан бирелгән бер нәмә генә. 1918 йылдың 6 июлендә Башҡортостан Хөкүмәте, бигерәк тә Башҡорт Хәрби Советының большевиктар менән килешеүгә уйлауы һис тә мөмкин түгел. Быға миллионлаған шаһиттар килтерергә мөмкин. Халиҡов тарафынан был таныҡлыҡ ҡағыҙы Советтар менән һөйләшеү мандаты булараҡ тәҡдим ителгән икән, был, әлбиттә, һыуға батып барған кешенең һаламға йәбешеүе кеүек бер нәмә генә. Ревком ағзалары был хәлде бик асыҡ аңлай һәм шуның өсөн протоколдарында айырым әйтеп китәләр.

**Документ номер 3**

Башҡортостан Хөкүмәте ғөмүми эштәр бүлеге. 6 июль, 1918 йыл, номер 4556

Танһаҡнамә

Башҡортостан Өлкә Советы ағзаһы Муллаян Халиҡов Башҡортостан Хөкүмәте тарафынан тышҡы мөнәсәбәт эштәре өсөн вәкил ителә.

Башҡортостан Хөкүмәте рәйесе — Әхмәтхан (Әхмәтзәки. — ***Ҡ.Ғ.***) Вәлидов
Тышҡы мөнәсәбәт эштәре бүлеге мөдире — Ғ.Әҙһәмов
Башҡортостан Өлкә Советы ағзаһы — С.Мерәҫов (рәйесе)
Н.Таһиров
Айытбаев

Төп нөсхәһендә ике номер: 1) Башҡортостан Хөкүмәтенеке, 2) Башҡорт Өлкә Советыныҡы (был һүҙ ревком тарафынан яҙылған булырға тейеш. — ***Ҡ.Ғ.***)

Төп нөсхәһе дөрөҫ: ревком рәйесе Б.Нимвицкий.

Иң аҙаҡ төп нөсхәнең раҫлығы Өфө губернияһы печате менән беркетелгән.

30 ғинуар ултырышынан һуң Өфө ревкомы, мәсьәләне аңлатып, Мәскәүгә телеграмма биргән, был телеграммаға яуап булараҡ, 1919 йылдың 6 февралендә иптәш Ленин һәм Сталин имзаһы менән Өфө ревкомы рәйесе Нимвицкий исеменә түбәндәге тарихи телеграмма килә.

**Документ номер 4**

*1919 йыл, 6 февраль. Өфө губревкомы рәйесе Нимвицкийға.*

*Халиҡовты ситкә ебәрмәҫкә, башҡорт полктары менән бергә Колчакҡа ҡаршы берләшкән фронтты майҙанға килтереү шарты менән амнистияға ризалыҡ бирергә. Советтар власы тарафынан башҡорттарға милли ирек бирергә — тулы гарантия. Шуның менән бергә башҡорт халҡының контрреволюцион элементтарын иң ҡаты рәүештә тамырынан ҡырҡып ташлау һәм башҡорт ғәскәрҙәренең пролетарский ышансылыҡтары өҫтөнән фактический контроль ҡаҙаныу, әлбиттә, лазм[7].*

*Ленин — Сталин "191".*

[7] Лазм — кәрәк, тейешле.

Халиҡов үҙенең Өфө ревком ағзалары менән һөйләшеүҙәренең һөҙөмтәһен февралдең 8-ҙәрендә Башҡорт Хөкүмәте ағзаларына еткерә. 8 февралдә түбәндәге ҡарарҙар ҡабул ителә.

**Документ номер 5**

1919 йылдың февралендә Башҡортостан Хөкүмәтенең Башҡорт революцион ғәскәрҙәре вәкилдәре менән ҡатнаш ултырышында Советтар власы менән мөнәсәбәт мәсьәләһе тураһында сығарған ҡарарҙары:

— Башҡорт халҡы — Башҡортостан Хөкүмәте һәм биш уҡсы, ике кавалерия полкынан ғибәрәт булған Айырым башҡорт революцион корпусы вәкилдәре йөҙөндә, Советтар власы менән һөйләшеү өсөн Советтар рәйесенә ебәрелгән Муллаян Халиҡовтың докладын тыңлағандан һуң, Башҡортостан һәм уның Советтар власы менән булған мөнәсәбәте мәсьәләһе тураһында асыҡ һәм рәсми килешеү яһау өсөн һис кисекмәҫтән Рәсәй Социаль Федерациялы шуралар йөмһүриәтенең ерле һәм мәркәз юлбашсы органдары менән һөйләшеүгә керешергә кәрәк, тигән ҡарар сығарҙы. Ҡилешеү шарттары Башҡортостан Хөкүмәтенең 1918 йылдың 12 ноябрендә булған ултырышында ҡабул ителгән шул уҡ шарттар булырға тейеш:

Йәғни, I. Башҡортостан Хөкүмәте һәм революцион ғәскәре үҙ өҫтөнә ала:

1) Ошо килешеүҙе яһау менән Советтар Хөкүмәтенә ҡаршы йүнәлдерелгән хәрәкәтте туҡтатырға, шуның менән бергә урыҫ контрреволюцияһына һәм донъя империализмына ҡаршы көрәш башларға.

2) Рәсәй Социаль Федерациялы шуралар йөмһүриәтенең бишенсе Советтар съезының 1918 йылдың 10 июль ултырышында ҡабул ителгән конституцияһы нигеҙендә муафиҡ[8] рәүештә Башҡортостан сиктәре эсендә идараның социалистик формаһын һис тә борғоланмайынса ғәмәлгә ҡуйыуҙы өҫтөнә ала.

II. Рәсәй Социаль Федерациялы шуралар йөмһүриәте үҙенең мәркәз етәксеһе органдары йөҙөндә үҙ өҫтөнә ала:

1) Һис кисекмәҫтән, Бөтә Рәсәй Советтар съезын көтмәйенсә, Ҡескәй Башҡортостан сиктәре эсендә Башҡорт Советтар йөмһүриәтен танырға һәм уны “Башҡортостан Автономияһына идара итеү тураһындағы положение”ның 1, 2, 3, 4, 5, 6 һәм 11 матдәләре буйынса билгеләнгән сиктәре эсендә һәм шунда уҡ күрһәтелгән администрация бүлектәре менән Рәсәй Социаль Федерация шуралар йөмһүриәте составына кергән тип иҫәпләргә.

2) Башҡортостан шуралар йөмһүриәтенә тулы рәүештә финанс ярҙамы күрһәтергә.

3) Составы тулы, корпус дәрәжәһенә еткерелергә тейешле булған Башҡорт революцион ғәскәре корпусын Ҡыҙыл Армия менән дөйөм нигеҙҙә контрреволюцияға ҡаршы көрәш өсөн лазм булған бөтә ҡоралдар менән тәьмин итергә.

4) Башҡортостан шуралар йөмһүриәте эсендә революцион тәртипте һәм тыныслыҡты һаҡлауҙы Башҡорт революцион ғәскәрҙәренә тапшырырға. Советтар власының ерле етәксеһе һәм мәркәз органдары менән һөйләшеү өсөн Башҡортостан Хөкүмәте һәм Башҡорт революцион ғәскәре, тейешле мандаттар менән тәьмин итеп, түбәндәге 5 кешене Советтар Рәсәйенә ебәрә:

[8] Муафиҡ — лайыҡлы, килешле.

1. Башҡортостан Хөкүмәте рәйесе Мстислав Ҡулаев.

2. Башҡортостан Өлкә Советы ағзаһы Муллаян Халиҡов.

3. Хәйретдин Сәғитов.

4. 4-се башҡорт уҡсы бүлеге һалдаты Георгий Ҡаранташев.

5. Башҡорт ғәскәре командирының адъютанты Әбдрәшит Бикбабов.

Күрһәтелгән делегаттарҙан М.Ҡулаев һәм М.Халиҡовты мәркәз Советтар власы менән һөйләшеү өсөн Мәскәү шәһәренә ебәрергә.

1919 йыл, 8 февраль, Башҡортостан Хөкүмәте мөһөрө
Ҡананикольск заводы
Башҡортостан Хөкүмәте рәйесе: Ҡулаев
ағзалары: А.Әҙеһәмов
(ике ҡултамға танылмай)
Айырым башҡорт революцион корпусы вәкилдәре: Ә.Вәлидов
Башҡорт ғәскәре штабы начальнигы вазифаһын үтәүсе: Ильяс Алкин.

*Иҫкәрмә:* делегаттарҙың 4-се номеры Зәки Вәлиди ҡулы менән һыҙылып ташланған һәм түбәндә Зәки Вәлиди ҡулы менән: "Һыҙылып ташланғанды дөрөҫкә иҫәпләргә" тип яҙылған һәм аҫтына Ә.Вәлидов ҡултамғаһы ҡуйылған. Зәки Вәлиди, ысынлап та, делегаттар араһында Ҡаранташевтың булыуын теләмәгән. Уны ебәрмәҫкә уйлаған булырға тейеш. Ләкин түбәндә килтереләсәк документыбыҙҙа Ҡаранташевты катип[9] сифатында күрәбеҙ. Тик уның фамилияһы бер урында Ҡаранташев, бер урында Ҡарангачев рәүешендә йөрөтөлә. Зәки Вәлидиҙең теләгенә ҡаршы был кешенең Башҡорт ғәскәре тарафынан ебәрелеүе мөмкин, йәки, һайланмайынса, катип сифаты менән генә барғанлыҡтан, уның делегаттар исемлегенән һыҙылып ташланған булыуы мөмкин. Ләкин был ысын дөрөҫлөктән йыраҡ, сөнки делегат итеп 5 кешенең ебәрелеүе асыҡ күрһәтелгән. 5-се номерлы документта күрһәтелгән делегация февралдең урталарында Өфөгә инеп, тағы ла ревком ағзалары менән күрешә. Был осорҙа Өфөгә мәркәз власынан да, 5-се армиянан да вәкилдәр килгән була. Февралдең 18-дә быларҙың тағы ла бер ултырышы була. Был протокол түбәндәгесә.

**Документ номер 6**

РСФСР Хөкүмәте вәкилдәре һәм Башҡортостан Хөкүмәте вәкәләтенең (представительство) 1919 йылдың 18 февралендә булған ултырышының Протоколы.

Ҡатнашыусылар:

1. Өфө революцион комитетынан — рәйес Б.Нимвицкий, ревком рәйесе урынбаҫары һәм Рәсәй Коммунистар (большевиктар) партияһының Өфө комитеты рәйесе З.А.Седенков, 5-се армияның рев.советынан В.М.Смирнов, Милләттәр эшен ҡараусы комиссариаттан Мирсәйет Солтанғәлиев

2. Башҡортостан Хөкүмәтенән — Хөкүмәт рәйесе Мстислав Ҡулаев, Башҡорт Өлкә Советы ағзаһы Муллаян Халиҡов, Башҡорт ғәскәрҙәре командиры адъютанты Әбдрәшит Бикбабов һәм секретарь сифатында Ҡаранташев.

[9] Ҡатип — секретарь.

Рәйеслек итеүсе И.Н.Смирнов ултырышты аса.

*И.Н.Смирнов:*

— Беҙ һеҙҙең тәҡдимдәрегеҙҙе тикшерҙек. Һәм төп мәсьәләләрҙең күбеһен беҙ бында хәл итә алмаясаҡбыҙ. Уларҙы Мәркәз генә хәл итә аласаҡ, тигән фекергә килдек. Һөйләшеүгә керешмәҫтән элек, беҙ, Башҡортостан Хөкүмәтенең ысынлап та ҡулында власы булған бер хөкүмәтме икәнлеген аңлашыуҙы лазм, тип иҫәпләйбеҙ. Һеҙ әлегә тиклем кемдәр яғында булғанһығыҙ, шулар менән арағыҙҙы өҙөгөҙ. Һеҙгә хәҙер берҙән-бер юл — үҙегеҙҙең хәрәкәтегеҙҙе Советтар менән берләштереү.

*Ҡулаев:*

— Мин һеҙҙең һүҙегеҙҙән шуны аңланым: Һеҙ беҙҙең тәҡдимдәребеҙҙе тикшергәнһегеҙ һәм, уйлайым, РСФСР Конституцияһы нигеҙендә Башҡортостан Автономияһын да танығанһығыҙ. Мәркәз Башҡорт Хөкүмәтенә килгәндә, ул инде йылдан артыҡ йәшәп килә. Ул дөйөм һайлау хоҡуғы нигеҙендә һайланған кешеләрҙән тора. Һайлауҙар 1917 йылдың 8 декабрендә Ҡоролтай тарафынан яһалды. Ләкин Хөкүмәт эсендә булған кешеләрҙең бер өлөшө кооптация[10] юлы менән алынғандар. Мәркәз Хөкүмәт Хөкүмәттең рәйесе һәм ағзаларынан тора. Урындарҙа уның үҙенең органдары бар. Бөтә Башҡортостан 13 кантонға бүленгән. Ул үҙенең Кескәй Башҡортостан тип аталған сиктәре эсендә, Ырымбур, Пермь, Өфө губерналары территорияһының бер киҫәген эсенә ала. Кантондар эске административ бүленеше буйынса волостарға бүленә. Кантон башында — кантон начальнигы, ә волость башында старшиналар тора. Ләкин тегеләре лә, былары ла һайланып ҡуйылған кешеләр. Хәрби ойошмалар хөкүмәт ағзаһы булған махсус шәхес ҡарамағында торалар. Шул уҡ шәхес бөтә көс менән командовать итә. Был көстәр хәҙерге ваҡытта 5 йәйәүле һәм 2 кавалерия полкы составлы бер корпустан ғибәрәт. Баштараҡ был көстәр төрлө фронттарға ташланғайнылар, ә хәҙер бер урынға йыйылғандар. Үҙебеҙҙең фронтты тоталар. Колчак үҙгәреше яһалғандан һуң Колчак һәм Дутов менән мөнәсәбәтте өҙҙөк. Нығыраҡ таныштырыу өсөн миңә түбәндәге документтарҙы иғлан итергә рөхсәт итегеҙ:

1. Башҡортостан Хөкүмәтенең Башҡорт революцион ғәскәре вәкилдәре менән 1919 йылдың 8 февралендә булған ҡатнаш ултырышында Советтар власы менән мөнәсәбәт тураһында сығарған ҡарарҙары,

2. "Өфө шәһәрендәге Советтар власының етәксе органдарына, 3-сө, 5-се Совет Ҡыҙыл Армияһының сәйәси бүлегенә" (был һуңғыһы табылманы. — ***Ҡ.F.***) тигән документтар иғлан итенә.

*И.Н.Смирнов:*

— Һеҙҙең хөкүмәтегеҙҙең хәлен тағы ла асығыраҡ аңлау өсөн, әйтегеҙ әле, һеҙҙең, ысынлап та, власть булып торған берәй территорияғыҙ бармы?

*Ҡулаев:*

— Башҡорт территорияһының шундай киҫәктәре бар һәм унда беҙ тулы хаким булып торабыҙ. Унда беҙҙән һәм беҙҙең ғәскәрҙәребеҙҙән башҡа бер кем дә юҡ. Ләкин Башҡортостаныбыҙҙың ҡаҙаҡтар тарафынан алынған, ишғәл ителгән[11] урындары ла бар.

[10] Кооптация — һайланма органдарға һайлау үткәреп тормайынса, яңы ағзалар йәки кандидаттар алыу.

[11] Ишғәл ителгән — баҫып алынған.

*И.Н.Смирнов:*

— Һеҙҙең тарафтан алынған ерҙәрҙә һеҙҙең хөкүмәтегеҙ берәй төрлө эш алып барҙымы? Налог йыйыу кеүек? Мәҙәни эштәр алып барыу кеүек?

*Ҡулаев:*

— Налогтар йыйылды, ләкин иҫке норма буйынса. Хәрби ойошма эштәрен алып барыу арҡаһында, мәҙәни эштәрҙе алып барыу бер аҙ тотҡарлыҡланды. Ләкин администрация аппараты шуға яраҡлы итеп төҙөлгән ине.

*В.М.Смирнов:*

— Һеҙҙә ер мәсьәләһе нисек төҙөлгән?

*Ҡулаев:*

— Принцип яғынан беҙ социализацияны таныйбыҙ. Ер бүленештәре үткәрелгән булһа ла, социализация мәсьәләһе беҙҙә, ғәмәлдә, үткәрелмәне.

*В.М.Смирнов:*

— Башҡорт ғәскәре командованиеһы ниндәй урындарҙа Колчак һәм Дутовтың дөйөм командованиеһы менән бәйләнгән?

*Бикбабов:*

— Август—сентябрь айҙарында дөйөм командование Дутов ҡулында ине. Ләкин һуңғараҡ беҙ бөтә көсөбөҙҙө Дутов тәьҫире аҫтынан сығарҙыҡ. Ырымбур эргәһенән үҙебеҙҙең полктарыбыҙҙы саҡырып алдыҡ. Хәҙер бөтә көсөбөҙ Вәлидов командованиеһы аҫтында тора.

*Нимвицкий:*

— Власть башында учредилкасылар торған мәлдә, Башҡортостан Автономияһы улар тарафынан танылған инеме? Учредилкасылар хәҙерге хөкүмәтте танығандар инеме? Һәм ҡасан да булһа хөкүмәт тарафынан мәҙәни эштәр алып барылдымы? Ни тиһәң дә, ҡайһы ваҡыттарҙа фронт йыраҡ торҙо бит.

*Ҡулаев:*

— Эйе, ул ваҡыттарҙа фронт Башҡортостандың тышында ине. Хөкүмәт тарафынан мәҙәни эш алып барылды. Башҡортостан Автономияһы һәм уның хөкүмәте учредилкасылар тарафынан танылған ине. Ләкин Директория Башҡортостан Автономияһына ҡаршы кампания алып бара ине. Колчак үҙгәрешенән бер аҙ ғына элгәрерәк бөтә хөкүмәтте тарҡатыу тураһында приказ ебәрелгән ине. Шул арала Омскиға һөйләшер өсөн делегаттар ебәрелгән булһа ла, улар Омскиға үҙгәреш ваҡытында барып еткәнлектән, һөйләшеүгә мөмкинлек тапманылар. Колчак менән Дутов та хөкүмәтте таратыу тураһында приказ биргәйнеләр. Ләкин был приказ да тик приказ көйөнсә тороп ҡалды. Ә хөкүмәт, факт булараҡ, әлегә тиклем йәшәп килә. Ҡорбанғәлиевтың ярҙамы арҡаһында 2 кантон Башҡортостан ҡарамағынан тартып алынды. Шуның менән бергә, Ҡорбанғәлиев башҡорт халҡы исеменән, башҡорт халҡы һәр ваҡыт берләшкән власть яҡлы булып килде, тип Колчакҡа иғлан итте.

*В.М.Смирнов:*

— Һеҙ үҙегеҙҙең бөтә көсөгөҙҙө, үҙ командованиебыҙ аҫтында, тип һөйләйһегеҙ. Хәлбүки, һеҙ бында Советтар власы менән һөйләшеүҙәр алып барырға теләгән ваҡытығыҙҙа, һеҙҙең “башҡорт саңғылы дикая дивизияһы”[12] тип аталған башҡорт полктары, Колчак менән берләшеп, беҙгә ҡаршы хәрәкәт итә.

---

[12] Саңғылы дивизия булмай. Һүҙ 1919 йылдың февралендә контрреволюционер Ҡорбанғәлиевтар етәкселегендә Колчак яғында һуғышҡан 3-сө башҡорт полкы тураһында. Был йәйәүле һәм кавалериянан торған башҡорт полкы. “Ҡырағай” термины оҫта һуғышҡан мосолман халыҡтары өсөн йыш ҡулланыла.

*Бикбабов:*

— Беҙҙең полктарыбыҙҙың береһе, өсөнсө полк, Ҡолчак бойороғо аҫтында ҡалды. Уны тартып алырға беҙ муафиҡ була алманыҡ. Ҡолчактың көстәре уларҙы Советтарға ҡаршы көрәшергә мәжбүр итә. Беҙҙең ҡулыбыҙҙа булған мәғлүмәткә ҡарағанда, хәҙерге көндә был полк Ҡолчак тарафынан расформировать ителгән.

*Нимвицкий:*

— Башҡортостан Хөкүмәтен таратыу тураһында ниндәй ҙә булһа берәй сара күрелдеме?

*Ҡулаев:*

— Махсус саралар күрелмәне. Был ниңә шулай булғандыр, аңлата алмайым. Ләкин кантон милицияларын ҡоралһыҙландырырға теләүе менән, айырым кешеләрҙе арестовать итеүҙәр булды.

*И.Н.Смирнов:*

— Үҙебеҙҙең гарантия бирергә әҙер торғаныбыҙ — Федерациялы Башҡортостан шуралар йөмһүриәтен принцип рәүешендә таныуҙан сығып. Тик практик саралар күреү тураһында ғына фекер йөрөтөргә тәҡдим итәм.

*В.М.Смирнов:*

— Вәлидов мәғлүм сиктәр буйынса беҙгә һуғыш хәрәкәтен туҡтатырға тәҡдим итә. Был беҙҙең өсөн уңайһыҙлыҡ яһай. Беҙҙең берләшкән фронтыбыҙ, беҙҙең хәрәкәтебеҙ сфераһында тышта ҡалған айырым урындарҙың булыуы мөмкин дә түгел. Шуның менән бергә, хәҙерге ваҡытта Башҡорт ғәскәре тарафынан ишғәл ителгән территорияны беҙҙең дошманыбыҙҙың ишғәл итмәүе тураһында беҙгә һис бер гарантия юҡ.

*Бикбабов:*

— Беҙҙең 5 йәйәүле һәм 2 кавалерия полкы булып торғанда, сәүиттәр беҙгә ярҙам һәм ҡорал биргән осраҡта, беҙ корпус төҙөйәсәкбеҙ. Ошондай көскә таянғанда, беҙ Башҡортостандың Ҡолчак тарафынан алынмауын гарантировать итә алыр инек. Ләкин, әгәр ҙә беҙ вазифаны үтәй алмаһаҡ, ул ваҡытта Башҡортостандың үҙ эсендә лә Советтар ғәскәре, әлбиттә, беҙгә ярҙам итергә мәжбүр буласаҡ.

*И.Н.Смирнов:*

— Һеҙ Башҡортостан территорияһын тарайтаһығыҙ. Һеҙҙең ғәскәри полктарығыҙ тарафынан Силәбе өйәҙе лә, Златоуст өйәҙе лә алынмаған.

*Бикбабов:*

— Башҡорт ғәскәрҙәре 25 саҡырым ерҙе тота. Әгәр ҙә беҙ мобилизация яһаһаҡ, беҙҙең Башҡортостан фронтын тоторға ҡулыбыҙҙан киләсәк.

*В.М.Смирнов:*

— Һеҙ һаман да тик Башҡортостан тураһында ғына һөйләйһегеҙ һәм Совет ғәскәрҙәренә Башҡортостан территорияһы эсенә үтергә хаҡ бирмәйәсәкһегеҙ. Хәлбүки, беҙҙең вазифабыҙ Башҡортостанды һуғышып алыу түгел, бәлки Ҡолчакты һәм Дутовты бөтөрөү, һәм бына ошо маҡсат өсөн беҙҙең ғәскәрҙәребеҙгә үтергә мөмкинлек биреү зарур.

*Бикбабов:*

— Ҡолчак һәм Дутовты бөтөрөү һеҙҙең генә түгел, беҙҙең дә вазифабыҙ. Әгәр ҙә Башҡорт ғәскәрҙәре Башҡортостан фронтын тота алмаһалар, ул саҡта һеҙ уларға ярҙам итергә тейешһегеҙ.

*И.Н.Смирнов:*

— Һеҙ тәҡдимдәрегеҙҙең I пунктында урыҫ империализмына ғына ҡаршы түгел, бәлки Бөтә Донъя империализмына ҡаршы көрәш тураһында һөйләйһегеҙ.

*Ҡулаев:*

— Мин уйлайым, беҙ дөйөм принципиаль мәсьәләләр тураһында килешергә тейешбеҙ, ә ҡалған мәсьәләләр тураһында штабтар килешерҙәр.

*В.М.Смирнов:*

— Беҙҙең уртаҡ булған эшебеҙҙең мәнфәғәте өсөн, әлбиттә, һеҙҙең ғәскәри полктарығыҙ хәрәкәт иткән районларҙы ла дөйөм командованиеның Совет ғәскәрҙәре штабы ҡулында булыуын танырға тейешбеҙ.

*Бикбабов:*

— Дөйөм командование, әлбиттә, бер булырға тейеш. Ләкин башҡорт полктарына килгәндә, улар менән командовать итеү башҡорттар ҡулында булырға тейеш. Шуның менән бергә, Башҡортостан фронтын башлыса тик Башҡорт ғәскәре полктары тоторға тейеш.

*И.Н.Смирнов:*

— Ғәмәли рәүештә[13] килешергә тиҙерәк ирешеү өсөн, һеҙ түбәндә килтерелгән ошондай хәл менән килешергә тейешһегеҙ: Башҡорт ғәскәрҙәре беҙҙең ғәскәрҙәребеҙгә ҡаршылыҡ күрһәтмәйҙәр һәм үҙҙәренең территорияһы аша үткәреп ебәрәләр. Бынан һуңғы һөйләшеүҙәр Шәреҡ фронтының штабында эшләнергә тейешле.

*Бикбабов:*

— Мин уйлайым ки, хәрби бүлектәрҙең хәрәкәтен берләштереү өсөн 5-се армияның вәкилен Ҡыҙыл Мәсеткә ебәрергә кәрәк.

*Халиҡов:*

— Һуғыш хәрәкәтен туҡтатыу тураһындағы мәсьәләне һис кисекмәҫтән хәл итеү һәм хоҡуҡ боҙоуҙан ҡотолоу өсөн, саралар күреү зарур. Шуның менән бергә, Башҡорт ғәскәрҙәренең Советтар ғәскәрҙәренә ҡаршы тормауҙарын, ләкин Башҡорт ғәскәрҙәренең ҡоралы уларҙың үҙ ҡулдарында ҡалырға тейешлеген таныу кәрәк булыр.

*Бикбабов:*

— Башҡорт ғәскәрҙәренең һуғыш хәрәкәте тураһындағы мәсьәлә Ҡыҙыл Мәсеттә хәл ителер. Шуның менән бәрәбәр Совет ғәскәре тарафынан Башҡортостан алынған ваҡытта, хәҙерге йәшәп килгән идара һаҡланырға тейеш.

*И.Н.Смирнов:*

— Колчак үҙенең Уралда ҡала алмаясағын һиҙә, шуның өсөн ул фронттың үҙ сиктәре эсендә лә мобилизация үткәрә. Былар араһында башҡорттар ҙа бик күп. Шул сәбәптән һеҙ башҡорт халҡына һәм Башҡорт ғәскәрҙәренә хитапнамә[14] менән мөрәжәғәт итергә тейешһегеҙ.

*Ҡулаев:*

— Бер хитапнамә 15 февралдә үк таратылырға тейеш ине. Икенсеһе килешеү яһалғас та, һис кисекмәҫтән таратыласаҡ.

---

[13] Ғәмәли рәүештә — тулыһынса.

[14] Хитапнамә — өндәмә, мөрәжәғәт.

*Бикбабов:*

— Мин тағы ла бер хәлде күрһәтеп китергә мәжбүрмен. Һәр бер кантон эргәһендә конный отрядтар бар. Улар тәртип һаҡлау юлында хеҙмәт итәләр. Беҙҙең фекеребеҙсә, улар үҙ урынында ҡалырға тейештәр.

*В.М.Смирнов:*

— Был мәсьәлә Шәреҡ фронты съезында хәл ителер.

Кәңәшмә һөҙөмтәһендә Башҡорт Хөкүмәте һәм Советтар Хөкүмәте вәкилдәре араһында был протоколға ғиләүә ителгән предварительный килешеү проекты ҡабул ителә. Проектты ҡабул иткәндән һуң, Ҡулаев Советтар власының Башҡорт Хөкүмәтенә матди һәм техник ярҙам күрһәтергә тейешлеген иғлан итә. Был ярҙам түбәндәге рәүештә булырға тейеш: 12 миллион һум аҡса, 10 мең винтовка, 1 миллион патрон, 150 пулемет, 2 дивизион еңел артиллерия һәм 5 мең комплект обмундирование бирергә.

*В.М.Смирнов:*

— Был мәсьәләлә беҙ һеҙгә тик Шәреҡ фронтының реввоенсоветы менән һөйләшкәндән һуң ғына яуап бирә алабыҙ.

*И.Н.Смирнов:*

— Ошоноң менән һөйләшеү ябылған, тип иҫәпләйем.

## Документ номер 7

Башҡорт Хөкүмәте менән Совет Хөкүмәте вәкилдәре араһында яһалған алдынғы (предварительный) килешеү проекты

1. Башҡорт шуралар йөмһүриәте эсендә власть 5-се Бөтә Рәсәй Советтары Съезының 1918 йылдың 10 июлендә ҡабул ителгән Советтар Конституцияһы нигеҙендә ойоштоpолоу шарты менән, башҡорт халҡына автономияға гарантия бирелә.

2. Элекке ваҡытта йәшәгән Башҡорт Хөкүмәтенең ағзалары, ошо килешеү проекты раҫланған (ҡултамға һалынған) моменттан башлап, үҙҙәренең үткәндәге эштәре өсөн язаланмаясаҡ.

3. Башҡорт ғәскәрҙәре һис кисекмәҫтән Совет ғәскәрҙәренә ҡаршы булған һуғыш хәрәкәтен туҡтаталар һәм үҙҙәренең ҡоралдарын Колчак һәм Дутовҡа ҡаршы йүнәлдерәләр һәм, Совет ғәскәрҙәренең хәрәкәте менән берләшеү өсөн, Совет командованиеһының күрһәтмәләрен үтәйҙәр, юғиһә Совет ғәскәрҙәре тарафынан яулап алынған территорияларға сығалар. Шуның менән бергә киләсәктә Үҙәктә килешкәнгә хәтлем Совет армияһы командованиеһы тарафынан күрһәтелгән районға күсәләр. Башҡорт Хөкүмәте һис кисекмәҫтән шул турала тейешле приказды бирер.

4. Башҡорт Хөкүмәте предварительный килешеү яһалғанын белдереп, Советтар йөмһүриәтенә ҡаршы көрәште туҡтатырға өндәп, башҡорт халҡына һәм Башҡорт ғәскәрҙәренә хитапнамә таратырға тейеш.

5. Мәркәз Советтар Хөкүмәте менән ҡәтғи рәүештә килешеү яһағанға тиклем, Советтар армияһы тарафынан алынған ерҙәргә Башҡорт Хөкүмәтенең власы йөрөтөлмәҫ.

6. Башҡорт ғәскәрҙәренең хәрәкәте менән Совет ғәскәрҙәренең хәрәкәтен берләштереү өсөн, Башҡорт Хөкүмәте Шәреҡ фронты эштәренә хөкүмәт вәкиле һәм хәрби командование вәкиле сифаты менән вәкилдәр ебәрер.

7. Килешеү мәркәздә яһалырға тейеш. Башҡорт Хөкүмәте үҙенең уполномоченный вәкилдәрен унда ебәрергә тейеш.

Өфө шәһәре һәм губернаһының революционный комитеты рәйесе;

Бөтә Рәсәй Ҡоммунистар (большевиктар) партияһының ваҡытлы Өфө губернаһы комитетының рәйесе;

5-се армияның революцион ағзаһы;

Йөмһүриәттең иң юғары Советы ағзаһы;

Милләттәр эшен ҡараусы Халыҡ Ҡомиссариаты вәкиле;

Мәркәз Башҡорт Хөкүмәте рәйесе;

Башҡорт Өлкә Советы ағзаһы;

Башҡорт ғәскәре командирының адъютанты.

Өфө шәһәре, 1919 йыл, 19 февраль.

*Иҫкәрмә:* был проект кәңәшмә тарафынан ҡабул ителһә лә, вәкилдәр проектҡа үҙҙәренең ҡултамғаларын һалмайҙар. Бының сәбәбе былай: шул проектты ҡабул итеп бөтөргән ваҡытта ғына, 1-се армияның Шәреҡ фронтының ревсоветы тарафынан, 1-се армияла Башҡорт Хөкүмәте менән һөйләшеүҙәр барғанын белдереп, телеграмма алына. Шуның өсөн кәңәшмә һөйләшеүҙәрҙе туҡтатып, вәкилдәрҙе Шәреҡ фронты ревсоветына ебәрергә ҡарар бирә. Был ҡарар түбәндәгесә.

**Документ номер 8**

РСФСР Хөкүмәте вәкилдәре һәм Башҡортостан вәкилдәренең 1919 йылдың 19 февралендә булған ултырышының

Протоколы

Йыйылышта ҡатнаштылар: Б.Нимвицкий, В.А.Седенков, И.Н.Смирнов, М.С.Х.Ғ.[15] Солтанғәлиев, Мстислав Ҡулаев, Муллаян Халиҡов, Әбдрәшит Бикбабов һәм Ҡаранташев иптәштәр.

Шул уҡ ваҡытта 1-се армия менән дә һөйләшеүҙәр барғанлыҡтан, Башҡорт Хөкүмәте менән киләсәктә һөйләшеүҙе туҡтатырға тәҡдим итеп, Шәреҡ фронты ревсоветы тарафынан бирелгән телеграмма тыңланғандан һуң, Башҡорт Хөкүмәте менән Советтар власы вәкилдәре араһында яһалған предварительный килешеү проектын имза итмәҫкә, бәлки уны материал сифаты менән Сембергә, Шәреҡ фронтының реввоенсоветына ебәрергә.

Ҡиләсәктәге һөйләшеүҙәрҙе лә унда күсерергә һәм, Башҡорт Хөкүмәте вәкилдәре киләсәктәге һөйләшеүҙәрҙе алып барыу өсөн, һис кисекмәҫтән унда китергә ҡарар ителде.

Өфө шәһәре, 1919 йыл, 19 февраль.

Ҡултамғалар: Б.Нимвицкий
В.Седенков
И.Смирнов

Өфө шәһәрендә булған һөйләшеүҙәр ошоноң менән тамам. Бынан һуңғы һөйләшеүҙәр Сембер ҡалаһында, 1-се армияның Шәреҡ фронты реввоенсоветы эргәһендә дауам итә. Ләкин һөйләшеүҙең күп өлөшө Өфөлә эшләнгән булғанлыҡтан, Шәреҡ фронты реввоенсоветы тик юғарыла килтерелгән проектын ғына тәҡдим итә. Советтар яғына сығыу тураһында тағы ла ҡайһы бер документтар булһа ла, былары шул уҡ нәмәләрҙе икенсе төрлөрәк иттереп һөйләүҙән ғибәрәт булғанлыҡтан, ошо урында ҡәнәғәтләнергә уйланым.

[15] М.С. Х.Ғ. — Мир-Сәйет Хәйҙәр-Ғәлиевич (Солтанғәлиев).